**Февраль - Шаҡай.**

**1-се картотека.**
**Елдең көсөн һәм йүнәлешен күҙәтеү.**
**Маҡсат:** балаларҙы үҙ - аллы елдең көсөн йүнәлешен табырға өйрәтеү, елдең көсө яуым - төшөмгә бәйлелеген төшөндөрөү, флюгер тураһында белешмә биреү.
Эш барышы:
- Ел тип ниндәй тәбиғәт күренешен атайбыҙ?
- Елдең ҡайһы яҡтан иҫкәнен нисек белеп була?
- Балалар талғын ғына иҫкән ел була. Беҙ уны яратабыҙ һәм биттәребеҙҙе елгә ҡуйып иркәләнергә яратабыҙ. Көслө ел - йәй көнө ҡойон, ә ҡыш көнө буран тип атала. Тағы ла көслөрәк елде дауыл тип йөрөтәләр.

Ҡотон алып күптәрҙең
Ҡоторҙо ғына дауыл.
Һынды ағас, ауҙы кәртә-
Ҡалтырап торҙо ауыл. (Н.Сәлимов)

**Тәжрибә эше:** уйынсыҡ флюгерға ҡарап елдең йүнәлешен билдәләү.
**Хәрәкәтле уйын: “Светофор” –** юл ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрөү, иғтибарлылыҡты тәрбиәләү, тиҙ реакцияға күнектереү.
**Хәрәкәтле уйын: “Бесәй һәм сыскан”** – етеҙлектә, сослоҡта күнектереү.
**Уйын - күнегеү** - ҡар туптарын вертикаль сәпкә ташлау, сослоҡта күнектереү**.**
**Хеҙмәт -** Ҡарҙы юл ситтәренә өйөү.

**2-се картотека.**
**Ҡар яуыуын күҙәтеү.**
**Маҡсат**-ҡар бөтөктәренең килеп сығышы менән таныштырыу.
**Эш барышы** - иртә менән тәҙрәнән

Тышҡа ҡараһам.
Күрәм – ап - аҡ тирә - яҡ-
Тәүге ҡар яуған.

һәр бөртөк, нурҙар бөркөп,
йылмая төҫлө,
улар бейеп, ҡанат елпеп,
еремә төштө. (С.Әлибаев)

талғын ғына емелдәп ҡар яуа. Ҡар бөртөгөнөң биҙәген күрергә мөмкин, ем - ем итә ер өҫтөнә ята.
- Бэйәләйгә, шарфҡа төшкән ҡар бөртөктәрен ентекләп ҡарау, бөтә ҡар бөртөктәре лә алты тажлы була, ләкин биҙәктәре төрлөсә матур.
**Хәрәкәтле уйын: "Ер, һыу, һауа**" - етеҙлек сосҡорлоҡта күнектереү, йәнле тәбиғәт менән таныштырыуҙы дауам итеү.
**Хәрәкәтле уйын: "Баҫтырыш"** - бөтә майҙансыҡ буйлап бәрелешмәй йүгерергә күнектереү.
**Спорт уйыны** "**Хоккей" -** йындың ҡағиҙәләрен үҙләштерергә ярҙам итеү, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен иҫтә тотоу.

**3- сө картотека.**
**Буранды күҙәтеү.**
**Маҡсат:** бурандарҙың нисек килеп сығыуы; зыяны һәм файҙаһы тураһында белемдәр биреү.
**Эш барышы -**

күҙе тондо ҡырҙарҙың, ел бейене,олоно,
Буран,буран ҡоторҙо тәҙрәләргә һуғылып.
Ҡолаҡ ситен,танауҙы өй түбәһен тетрәтеп ,
Семетергә тотондо. ергә төштө йығылып.

Елдең ныҡлап иҫеүе ҡар менән ҡушылыуы буран тип атала.
Буран юлдарҙы һәм бушлыҡтарҙы ҡар менән ултыра
**Хәрәкәтле уйын: "Энә менән еп"** – сигнал буйынса майҙансыҡта бәрелешмәй генә йүгереүҙә күнектереү, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү
**Хәрәкәтле уйын: "Баҫтырыш"** - бөтә майҙансыҡ буйлап бәрелешмәй йүгерергә күнектереү.
**Спорт уйыны "Хоккей" -** Уйындың төп элементтары нда күнектереү, етеҙлек сослоҡ күҙ күремен үҫтереү, спортсмен булырға теләк тыуҙырыу.

**4- се картотека**

**Күҙәтеү - көрттәрҙең тәрәнлеген үлсәү.**

**Маҡсат -** Үҙ фекереңде әйтергә, һығымталар яһарға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**

- Иң тәрән көрт майҙансыҡтың ҡайһы тирәһендә? Уның тәрәнлеген беҙ рулетка үлсәгес менән үлсәйбеҙ, 1метр 20 см булды, ә веранданың алдында бөтөнләй әҙ генә ҡар, уның тәрәнлеге 10см ғына.

**Хәрәкәтле уйын: ”Крепость”** - яңы уйындың ҡағиҙәләре менән таныштырыу, балалар һаулығын нығытыу**.**

**Хәрәкәтле уйын: "Кем мәргән"** - Сәпкә ҡар уң һәм һул ҡул

**Хеҙмәт -** Веранданың иҙәнен ҡарҙан һеперер сығарыу**.**

**5-се картотека**

**Машиналарҙы күҙәтеү**

**Маҡсат -** Урамда үткән машиналарҙы күҙәтеү - уларҙың кешегә файҙаһы .зыяны тураһында фекер йөрөтөү.

Эш барышы -

На тиһәң - атламай,
Тр – р, тиһәң - туҡтамай.
Бесән һалһаң ашамай,
Ҡысҡыра - ҡысҡыра саба,
Йүгереүҙән бушамай. (машина)

Эш барышы;

- Балалар, юлда ниндәй машиналар күрәһегеҙ? Ниндәй машиналарҙы беләһегеҙ? Улар ниндәй маҡсат менән йөрөйҙәр тип уйлайһығыҙ?

**Хәрәкәтле уйындар "Ҡышҡы күбәләктәр"** - сослоҡта, етеҙлектә күнектереү, бөжәк атамаларын иҫтә ҡалдырыу.

**Хәрәкәтле уйындар "Ҡарсыға һәм себештәр"** – сигнал буйынса майҙансыҡта бәрелешмәй генә йүгереүҙә күнектереү, хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү

**Хеҙмәт** - майҙансыҡта ҡарҙы көрәү, ҡар ҡоролмалары яһау өсөн ҡарҙы бер урынға өйөү.

**6-сы картотека**
**Эттәрҙе күҙәтеү.**
**Маҡсат:** Балаларҙың эттәр тураһында белемдәрен барлау, уларға хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен белергә, уларға ҡарата хәстәрлек тойғоһо тәрбиәләү.
**Эш барышы -**
**Йомаҡ ҡойоу -** кешенең дуҫы - йорттоң һаҡсыһы. (эт)
Ата ҡаҙҙан ситкә ҡасып,
Өрөп әйтте көсөгөм;
Яҡын килмә! Мин бит бына,
Айыу кеүек көслөмөн. (Н.Салимов)
Бәйһеҙ эт йөрөтөргә яраймы, юҡмы, бының өсөн ниндәй яза ҡаралған, эттәр һөжүм итһә, нимә эшләп була?
**Хәрәкәтле уйындар “Флагты ҡолатмы”** - Предметтар араһында йылан кеүек атлап йөрөү, иғтибарҙы үҫтереү.
**Хәрәкәтле уйындар “Беҙ - күңелле шат балалар”** - уйындың ҡағиҙәләрен боҙмай уйнарға шиғырҙың һүҙҙәрен дөрөҫ һәм аңлайышлы әйтергә өйрәтеү.
**Уйын – күнегеү -** санала бер - беренде шыуҙырыу - бәләкәй тауҙан өйөп төшөргә сананың бауын ҡулда тоторға, ысҡындырмаҫҡа күнектереү

**7- картотека**
**Юлдарҙы күҙәтеү**
**Маҡсат:** юлдарҙың әһәмиәтлеген, аңлатыу, юлдар таҙа булһын өсөн нимә эшләргә кәрәклеген күҙ уңында тотоу.
**Эш барышы:**
Йәшәйҙәр ти дүрт туған
Йөрөйҙәр гел бер юлдан
Икеһе арттан йүгерә,
Икеһе алдан бара.? (Г. Юнысова)
- Балалар юл нимә ул? Юл халыҡҡа кәрәкле нимәме? Юлдар кешегә бик кәрәк, шуға күрәлә был эш менән хөкүмәт булыша, юлдар һәйбәт булһа машиналар боҙолмай, кеше лә теләгән еренә тиҙ генә барып етә ала. Юлдарҙы һаҡлап, йүнәтеп кенә торор

кәрәк.
**Хеҙмәт** - майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу.
**Уйын - күнегеү** - Саңғыла йөрөргә булышлыҡ итеү.
**Хәрәкәтле уйындар:** балаларҙың үҙ теләктәре буйынса уйындар, уларҙы үҙаллылыҡҡа, ойоштороу һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итеү.

**8 –се картотека**
**Бурандан һуңғы тәбиғәт күренештәрен күҙәтеү.**
**Маҡсат** - Бурандың һөҙөмтәһен күрергә,һығымталар яһарға булышлыҡ итеү.
**Эш барышы:**-көрттәрҙең бейеклегенә һәм күплегенә иғтибар итеү, бурандың сығыуына нимә сәбәпсе була - фекерҙәргә иғтибар итеү.
Урал иңләп ҡарҙар яуа,
Яуа көн - төн буранлап.
Алыҫтағы тау күгелйем.
Яҡындағы сағыу аҡ. (Ф.Туғыҙбаева)
Күҙе тондо ҡарҙарҙың,
Буран, буран ҡоторҙо
Ҡолаҡ ситен, танауҙы
Семетергә тотондо. (М.Ғәли)
**Хәрәкәтле уйындар: ”Йәшенмәк**” - ҡағиҙәләрҙе тулыһынса үтә, һанашмаҡ ятлау, уйын менән ҡыҙыҡһындырыу.
**Хәрәкәтле уйындар: ”Буш урын” -** уйынға саналарҙы ла ҡулланыу, етеҙлек сослоҡта күнектереү.
**Уйын – күнегеү -** ҡаршылыҡтар аша атлап йөрөү.
**Хеҙмәт** - майҙансыҡты ҡарҙан таҙартыу, бер урынға ҡар өйөмдәрен өйөү.

**9-сы картотека**
**Ҡышлаусы коштарҙы күҙәтеү**
**Маҡсат -** ҡоштар тураһында белемдәрен барлау, ҡышлаусы ҡоштарҙың аҙыҡ табыу ысулдарын аңлатыу, тере организмды йәнһеҙ тәбиғәттән айырырға булышлыҡ итеү.

**Эш барышы:**
**Йомаҡ ҡойоу-**
Аяғы аҡтай, ҡойроғо ҡоромдай, мороно боҙҙай, күҙе тоҙҙай, йөрөй елдәй. (һайыҫҡан).
Ағас башы туҡылдаҡ, туҡый - туҡый туҡ булдыҡ. (тумыртҡа)
- Яҙын уйнай, йүгерә, голдор ҙа голдор килә, ҡышын да ул беҙҙә ҡала, ҡар аҫтына ла инә. (ҡор)
**Хәрәкәтле уйындар “Себештәр һәм ҡарауылсы“** балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү, етеҙлектә, иғтибарлылыҡта күнектереү.
**Хәрәкәтле уйындар үҙ теләктәре буйынса -** лидерлыҡ сифаттарын тәрбиәләү.
**Спорт уйыны “Хоккей” -** сәкән таяҡтары менән хәүефһеҙ ҡулланырға өйрәтеү.

**10 –сы картотека**
**Шыршы ағасын күҙәтеү**
**Маҡсат:** Көҙ, ҡыш башында был ағастың үҙгәрештәре тураһында һөйләргә өйрәтеү, фантазия - хикәйә төҙөргә булышлыҡ итеү**.**
**Эш барышы:**
- Йәйен-ҡышын бер төҫтә,үҙгәрмәй ул бер бөртөк тә. (шыршы)
- Шыршы сәнскеле ағас, ләкин уны ла төрлө хәүеф һағалай. Көслө елдәрҙә, ҡар күп ваҡытта уның ботаҡтары һына, ҡар әҙ ваҡытта уның тамырҙары өшөп ул һәләк була, шуға күрә лә ҡыш шыршы ботаҡтарындағы ҡарҙы ҡағып төшөрөргә, олоно янында ҡарҙы тапап уға йылылыҡ ойошторop ярҙам итергә кәрәк.

**Хәрәкәтле уйындар “Хәйләкәр төлкө“** балаларҙың хәрәкәт әүҙемлеген үҫтереү, етеҙлектә, иғтибарлылыҡта күнектереү, ихтияр көсөн тәрбиәләү.
**Спорт уйыны “Хоккей”** - сәкән таяҡтары менән хәүефһеҙ уйнарға күнектереү.